# «Алтын битлек» ғилләһе — ҡорамала

*Һуңғы көндәрҙә республиканың сәнғәт даирәһендә Нестеров фамилияһы йыш һәм был исемдең ҙур ғорурлыҡ менән яңғырауы тәбиғи. Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, дөрөҫөрәге, театрҙың баш рәссамы Альберт Нестеров Рәсәйҙең иң абруйлы Милли театраль премияһына — "Алтын битлек"кә лайыҡ булды. О, фестиваль еңеүселәре иғлан ителәсәк ул кис!.. Ярай әле Интернет селтәре бар, уның аша ваҡиғалар барышын on-line режимда театр актрисаһы Гөлнара Ҡаҙаҡбаева ентекле итеп еткереп торҙо. Ул үҙе "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһына дәғүә итә ине. Фестивалгә республикабыҙҙың төп театры "Ҡара йөҙҙәр" (М.Ғафури. А.Абушахманов, Ш.Ғилманова инсценировкаһы. Режиссеры — А.Абушахманов) спектакле менән барлығы биш номинацияла тәҡдим ителеп, "Костюмдар буйынса иң яҡшы рәссам эше" тигәнендә лайыҡлы еңеү яулаңы. Мәскәүҙең Станиславский һәм Немирович-Данченко исемендәге музыкаль театрында барған бүләкләү тантанаһында Альберт Нестеровтың исеме яңғырағас, Өфөнән килгән ижади төркөмдөң ихлас ҡыуаныуын, ҡайнар алҡыштарын ишетмәү мөмкин түгел ине... Уртаҡ еңеү, уртаҡ һөйөнөс...*

*"Алтын битлек" премияһы лауреаты — рәссам Альберт НЕСТЕРОВТАН күп нәмәләр хаҡында һорашҡы, Мәскәү тарафтарында еңеү яулауҙан һуң тәьҫораттары менән уртаҡлашҡы килде. Сер түгел, бөгөн был шәхесте республика, ил кимәлендәге киң мәғлүмәт саралары тыныс ҡалдырмай, һорауҙар яуҙыра, фотоға төшөрә. Милли театрыбыҙ донъяһында барған ҡыуанысл ы хәлдән нисек ситтә ҡалаһың — батырлыҡты ҡулға тотоп, тәү ҡарашҡа һүҙгә һаранырак, бик тыйнаҡ тойолған рәссамдың эш уры- нына юлландыҡ... "Битлеген" сисер, моғайын.*

*Альберт Нестеров «Алтын битлек» менән*



**— Хәйерле көн, Альберт Валерьевич! Республиканың ғына түгел, тотош ил тамашасыһы һеҙҙе билдәле рәссам Михаил Нестеровтың нәҫеленән тип уйлай. Ошо хәлгә асыҡлыҡ индереп китәйек, туғанымы һеҙ уға, әллә фамилияларығыҙ ғына бер ишме?**

— Нестеров менән бөтөнләй туған түгелбеҙ. Ғөмүмән, был фамилияның сығышы Беларусь Республикаһынан. Киң танылған рәссам менән бер фамилия йөрөтөү мәртәбәле, әлбиттә. Үҙем иһә Өфөлә тыуғанмын, ошонда үҫтем, уҡыным.

**— Атайығыҙ йә әсәйегеҙ рәссам түгелме?**

— Юҡ, әсәйем бала сағында һүрәт төшөрөргә яратҡан былай. Тик ҡартатайым ҡыҙын сәнғәт мәктәбенә

уҡырға бирмәй — балаһының бер үҙен унда ебәрергә ҡыйынһына — юлда трамвай, машиналар күп.... Ғәжәп тә кеүек, әммә тап ошо сәбәптән — юл хәүефхәтәренән ҡурсалап — әсәйемде махсус мәктәпкә бирмәгәндәр. Аҙаҡ инде, мин рәсем серҙәренә төшөнгән мәлдә, әсәйем минең менән мәктәптә, өлкән төркөмдә уны-быны һыҙғылай, төшөрә ине.

**— Тимәк, һеҙгә был һәләт әсәйегеҙҙән күскән?**

— Шулай килеп сыға инде. Ғәҙәттә, ата-әсә үҙе тормошҡа ашыра алмаған хыялын йә уйын балаларында булһа ла күрергә тырыша бит. Өфө сәнғәт мәктәбендә рәсем, живопись, композиция йүнәлештәрен үҙләштерҙем.

**— Урта белем алғас, Өфө дәүләт сәнғәт институтына юл тотҡанһығыҙ, шикелле... Театр бүлегенә, эйеме?**

— Эйе, тик уға тиклем мин сәнғәт училищеһына уҡырға индем, әммә икенсе курста “ҡыуылдым”.

**— Нимә өсөн?**

— Төп йүнәлешкә ҡағылмаған фәндәр буйынса өлгәшмәгәнем өсөн. Физика, химия һәм башҡалар инде. Артабан Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр бүлегенә индем. Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов йыйҙы ул курсты. Беҙҙең курс эксперименталь ине. Бар яҡлап төплө, киң белем алдыҡ. Башҡорт дәүләт академия драма театрында данлыҡлы рәссам Таң Еникеевҡа ассистент булып бай тәжрибә тупланыҡ. Уның менән сәхнә биҙәлеше буйынса төрлө макеттар эшләнек, аралашыуыбыҙ ғына ла бик файҙалы булды.

Уҡыуҙы тамамлағанда «Драма режиссеры» тигән диплом алдым. Был диплом театрҙа рәхәтләнеп эшләү мөмкинлеге бирә, тине уҡытыусыларыбыҙ, педагогтар, шаяртып. Хәлегеҙҙән килһә, хатта көй яҙырға ла, ут урынлаштырырға ла, уйнарға ла, спектакль биҙәргә лә, бейеү ҡуйырға ла мөмкин һеҙгә, тиҙәр ине.

Уҡып сыҡҡас, Наилә Абдулхай ҡыҙы Байкова (хәҙер Сәфәрғолова) мине Салауат башҡорт дәүләт драма театрына ҡуйыусы-рәссам итеп эшкә саҡырҙы. Һуңынан ошо театрҙың баш рәссамы булып киттем.

**— Был театрҙа эшләгән осорҙағы ниндәй спектаклдәр хәтерегеҙгә уйылып ҡалған?**

— Унда байтаҡ спектаклдәр ҡуйылды. Билдәле рәссам Дмитрий Хильченко Башҡортостандың төньяҡ өлөшөн хеҙмәтләндерһә, мин Стәрлетамаҡ, Салауат тарафтарында — Башҡортостандың көньяғында эшләнем. Салауатта Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Ханов (ул ваҡытта Салауат театрының баш режиссеры), Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Азат Йыһаншин (ул саҡта Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының художество етәксеһе) менән берлектә күп кенә спектаклдәр әҙерләп сығарҙыҡ.

**— Бөгөнгәсә нисә спектакль ҡуйылған, һанағанығыҙ юҡмы?**

— Яңыраҡ иҫәпләп ултырғайным, 70-тән артып киткән.

**— Яңылышмаһам, һеҙ 2012 йылда Өфөгә — Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә килдегеҙ...**

— Эйе, инде 4-се ижад миҙгеле үтеп бара.

**— Республиканың төп театрында нисек эшләп киттегеҙ? Башҡа театрҙарҙан ҡайһы яғы менән айырыла “башдрам”?**

— Дәүмәле менән айырыла кеүек академтеатр. Был башҡа донъя кеүек. Бәлки, баш ҡала шарттарының юғары, талаптарының етдиерәк булыуынандыр... Бындағы труппа, хеҙмәткәрҙәр ҙә һан буйынса күберәк, ниндәйҙер ҙур, оло организм кеүек.

**— Нимә менән эш итеү еңелерәк: комедия менәнме, әллә драма менәнме?**

— Әллә инде, айырып ҡына әйтеп булмай. Тамаша залынан ҡарап ултырыу ғына еңел, ә ябай комедия булһынмы, масштаблы драмамы — һәр береһе айырым ваҡыт, көс, илһам талап итә.

**— М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрындағы тәүге эшегеҙ Александр Островскийҙың “Бирнәһеҙ ҡыҙ” әҫәре буйынса булды. Спектакль биҙәлешендә ҡара төҫтөң өҫтөнлөк алыуы хәтерҙә ныҡ һаҡланған...**

— Сәхнә бит ҡараңғы төҫтә түгел, ә аҡлы-ҡаралы итеп биҙәлгән, ретро кинолар кеүек. Рәссам буларaҡ, мин унда аҡ төҫтән алып ҡараға тиклем, көл төҫөнөң әллә нисә сағылышын күрәм. Финалда Лариса Огудалованың ғүмере өҙөлгәс кенә спектаклдә ҡыҙыл тап хасил була. Был — беҙҙең режиссер менән уйлап сығарған юл.

**— Тамашасы “Бирнәһеҙ ҡыҙ”ҙы нисек ҡабул итте?**

— Яҡшы, шикелле. Спектакль дә, театрҙағы эшем дә ыңғай баһа алды. Драмалағы хәлдәр барған урын да, ваҡыт та үҙгәртелде, замансаға күсерелде. Ҡостюмдар ҙа шулай уҡ ниндәйҙер Америка стилендә кеүек. Урыҫса элементтар алынды, һәм был алым тамашаны йәнләндерҙе генә.

Яҡут режиссеры Сергей Потапов Астана ҡалаһында А.Чеховтың “Сейә баҡсаһы” спектаклен ҡуйҙы. Күп нәмәне, исемдәрҙе лә үҙгәртеп әҙерләгән. Минеңсә, был бик ҡулай, заманса алым. Актерҙар урыҫ геройҙарының исемдәрен дә, характерҙарын да ҡаҙаҡсаға яҡынайтҡандар, улар ерлегендә барыһы ла бик тәбиғи килеп сыҡҡан.

**— Былдай алымға һеҙ ыңғай ҡараштаһығыҙ, тимәк?**

— Унан бигерәк, бында тәрән мәғәнә һалына. Әҫәрҙәрҙе үҙ ерлегебеҙгә яҡынайтыу кәрәк. Күптән түгел генә бер режиссерҙың әңгәмәһен уҡығайным... “Мин XVI быуатта йәшәмәнем, һәм ул заманда нисек йөрөгәндәрен, нимә ашағандарын да белмәйем. Ҡитаптан уҡып ҡына төшөнгәнмен, әммә уны ысынбарлыҡта халыҡҡа — тамашасыға нисек еткерергә? Хәҙерге замандағы күренештәрҙең нисек башҡарылғанын беләм, һеҙгә лә уны тәҡдим итә алам. Һәр нәмә тик шәхси тәжрибә аша ғына еткерелергә, баһаланырға тейеш...”, — ти ул. Был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ барҙыр...

*«Ҡара йөҙҙәр» спектакленән күренеш. Бәҙәр — Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Гөлнара Әмирова, Хәмиҙә — Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың, Татарстандың халыҡ артисткаһы Илсөйәр Ғәзетдинова, Ғилми — Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Тәнзилә Хисамова.*



**— Спектакль өҫтөндә эшегеҙ нимәнән башлана?**

— Пьесанан. Тәүҙә уҡып сығам, аҙаҡ режиссер менән аралашам, кәңәшләшәм.

**— Актерҙар менән аралашыу эштең ҡайһы этабында атҡарыла?**

— Әгәр нимәлер аңлашылмаһа, уларға мөрәжәғәт итәм. Йә актерҙың уйыны килеп сыҡмаһа, йәки персонаждың характеры, уй-фекере аңлашылмаһа — бергә йыйылабыҙ. Әгәр декорацияларҙың, костюмдарҙың эскиздарын эшләп тә, ул актерҙың ҡарашы менән тап килмәй икән, был осраҡта ла аралашыу мөһим.

**— Спектаклдең декорациялары, костюмдар ҡасан күҙаллана башлай?**

— Шунда уҡ.

**— Әҫәрҙе уҡып бараһығыҙ, алдығыҙҙа спектаклдең биҙәлеше сыға торамы ни?**

— Улай уҡ түгел дә. Уҡыйһың... Ҡайһы саҡта бер үк әҫәрҙе унар тапҡыр уҡып сығырға мәжбүр булаһың. Шунан һуң ғына геройҙарҙың үҙҙәрен күрә, тормоштарына төшөнә башлайһың. Пьесаны бер-ике тапҡыр ғына уҡып, йәһәт кенә эш башлаған осраҡтар ҙа була. Театр эше ул шул уҡ йөкләмә, мәсьәлә кеүек, уны мотлаҡ сисергә, яуабын табырға кәрәк.

**— Премьераға бик аҙ ғына ваҡыт ҡалғанда биҙәлеште йә актерҙарҙың костюмдарын үҙгәрткән саҡтар буламы?**

— Бындай хәлдәр булғылай, әммә минең эш дәүеремдә осрағаны юҡ. Спектакль сығарыу шул уҡ етештереү процесы кеүек бит. Әгәр ҙә актер премьераға ике-өс көн ҡалғас та геройында нимәнелер тиҙ генә үҙгәртә йә башҡа костюм кейә ала икән, декорацияларға ҙур яңылыҡ индереү ауырыраҡ. Бөтә нәмә әҙер, инде яһалған бит. Спектаклде театрҙың художество советына тапшырған ваҡытта "Эх, быны икенсерәк итергә, тегеһен шулайыраҡ үҙгәртергә булыр ине", тигән уй-фекерҙәр ҙә килеүе мөмкин. Нindәйҙер штрих өҫтәгән хәлдә лә, декорацияны ҡырҡа яңыртып булмай. Ҡабатлайым, етештереү процесын баштан уҡ ентекле әҙерләргә кәрәк.

**— Спектаклгә декорацияларҙы әҙерләүгә күпме ваҡыт китә?**

— Төрлөсә. Спектаклгә ҡарап инде.

**— "Ҡара йөҙҙәр"гә, мәҫәлән, күпме кәрәк булды?**

— Ике ай тирәһе әҙерләгәнбеҙҙер.

**— Был спектаклдә тамашасы сәхнәлә ултыра. Тамашасының урынын алыштырыу кемдең идеяһы булды?**

— Режиссер Айрат Әхтәм улы Абушахмановтың. Ул спектаклдең исемен иғлан иткәс тә тиерлек, тамашасы залын мәсет рәүешендә күҙ алдына килтерҙек. Театрҙың ҡиәфәте лә изге йорттоҡона тартым бит — колонналар, балкондар, аҡ, йәшел төҫтәр, бәрхәт. Мәскәүгә "Ҡара йөҙҙәр" менән барғас та үҙебеҙҙең театрға оҡшаған бина эҙләнек. Һөҙөмтәлә Яузалағы театраль-концерт залында уйнаныҡ. Әйтергә кәрәк, тап ошо тарихи бинала билдәле "Карнавал төнө" комедияһы төшөрөлгән.

**— Мәскәүҙә театр эҙләп йөрөнөгөҙмө ни?...**

— Эйе,"Алтын битлек" фестиваленең ойошторoccur комитеты менән берлектә тәҡдим ителгән бер нисә театр бинаһын ҡарап сыҡтыҡ. Беҙгә фәҡәт балконлы зал кәрәк ине.

**— "Алтын битлек" премияһына лайыҡ булғас, быға сәбәпсе — "Ҡара йөҙҙәр" спектакленә ҡарашығыҙ үҙгәрмәнеме? Тәьҫораттарығыҙ нindәй?**

— Юҡ, һис кенә лә. Барыһы ла шул уҡ ҡалды. Әгәр ҙә сәхнәгә сығыуҙан актерҙар нindәйҙер ҡәнәғәтлек ала икән, миңә халыҡ алдына сығыу кинәнес бирмәй. Мин спектакль өҫтөндә эшләүсе ижади төркөм кеүек шаршау артында ҡалыуҙы хуп күрәм.

**— Спектакль ҡараған ваҡытта иғтибарығыҙҙы иң тәүҙә нимәгә йүнәлтәһегеҙ?**

— Рәссам булғас та, сәхнәнең нисек биҙәлеүен генә ҡарап ултырам икән, тип уйламағыҙ. Мин спектаклде тулыһынса ҡарайым. Актерҙарҙың уйынын күҙәтәм. Һис шикһеҙ, нимәлер юғары кимәлдә йә, киреһенсә, еренә еткереп эшләнмәгән икән, ул да иғтибарҙан ситтә ҡала алмай. Кино ҡарағанда ла шулай бит: ҡайһы саҡта фильмдың һәр детале уйланып, төплө эшләнгән була, актерҙарҙың кейемдәре, уларҙың атлап йөрөштәре, ҡылыҡтары, сәхнә интерьеры, биҙәүестәр — һәммәһе лә урынлы. Һуғыш тураһындағы кинола, мәҫәлән, һәр шкаф, тартма тиерлек үҙе бер тарих һөйләй кеүек, ошо ваҡиғаларҙың ысын шаһиты кеүек тойола, ҡабул ителә.

**— Башҡа театрҙарға йыш йөрөйһөгөҙмө?**

— Төрлөсә була. Һуңғы арала йышыраҡ йөрөй башланым. Силәбе ҡалаһында Халыҡ-ара фестивалдә булғайныҡ, унда ҡатнашҡан театрҙар башҡа коллегаларының спектаклдәрен дә ҡарарға тейеш ине. Үҙебеҙҙең сығыштан һуң (О.Жанайдаров. «Джут» (Һуңғы йәйләү) спектакле, режиссеры — А.Абушахманов) бер нисә көнгә ҡалып, спектаклдәр ҡараныҡ. Силәбе Яңы художество театрының “Яҡты кешеләр” (В.Шукшин) һәм “Күпер янында” Пермь театрының “Ҡоннемаранан баш һөйәк” исемле спектаклдәре нығ оҡшаны, һоҡландырҙы. Театрҙарҙың ихлас хеҙмәтен билдәләмәү мөмкин түгел!

**— Айырып әйткәндә, нимәһе менән йәлеп итте уларҙың сығышы? Биҙәлеш менәнме, әллә актерҙарҙың уйынымы?**

— Бар яҡлап та камиллыҡ булыуы һоҡландырҙы. Сәхнә биҙәлеше лә, актерҙар ҙа, тауыш та, йыр-моң да — бөтәһе бергә... Бигерәк тә Пермь ҡалаһынан килгән театр таң ҡалдырҙы. Улар ай һайын тиерлек төрлө фестивалдәрҙә ҡатнаша, бик әүҙем эшләй.

**— Театр донъяһында, ғөмүмән, яңылыҡтар йыш күҙәтеләме, мода бармы?**

— Сәнғәттең һәр тармағындағы кеүек, театрҙа ла мода бар. Ниндәйҙер тенденциялар, ағымдар бар. Ҡайһы бер нәмәләр хәҙерге тамашасыны ҡыҙыҡһындырмай, бәғзеләрен хатта эшләргә лә кәрәкмәй.

**— Ә бөгөн театрҙа эшләргә ярамаған әйбер бармы?**

— Бөгөнгө заманда тыйыуҙар юҡ һымаҡ, йәнәһе лә, нимә теләйһең, шуны эшләйһең. Мода, әлбиттә, бар, унан ҡасып ҡотолормон тимә. “Алтын битлек” фестивалендә ҡатнашҡан

*“Ҡара йөҙҙәр” спектакле.*
*Гәлимә ролендә — Гөлнара Ҡаҙаҡбаева*



күп спектаклдәрҙә геройҙар ҡәҙимге заманлаштырылған кейемдә, йә булмаһа классик смокингта, пинжәктә уйнаны. Быларҙың барыһы ла, әлбиттә, заманға ярашлы, еренә еткереп эшләнгән ине. Ә беҙ тап милли колоритлы, күҙгә һирәк салынған, билдәле бер стилдәге костюмдарыбыҙ менән "трендта булмау"ыбыҙ менән айырылып торҙоҡ та инде.

**— "Ҡара йөҙҙәр" спектаклендә беҙ күргән күлдәктәр тотош ҡораманан тегелгәнме?**

— Эйе, ҡатын-ҡыҙҙарҙың күлдәктәре шундай алым менән яһалған. Ғөмүмән, башҡорт халҡының милли кейемдәре тотошлай бер туҡыманан тегелмәгән. Бынан байтаҡ йылдар элек үҙемә асыш яһағайным. Баҡтиһәң, боронғо туҡыу станоктарының киңлеге, яңылышмаһам, 40 сантиметр тирәһе генә тәшкил иткән. Йәғни, кейемдең хатта арҡа өлөшөн дә бер бөтөн туҡыманан тегеп булмаған. Һөҙөмтәлә кейем-һалым шундай ҡорамаларҙан яһалған да инде. Аҙаҡ, тауар күпләп сыға башлағас, кейемде һатып алғандарҙыр, ә өйҙә туҡылған кейем әлеге өлөштәрҙән йыйылған.

"Ҡара йөҙҙәр" спектакленә костюмдар әҙерләгән мәл... Хеҙмәттәшем — Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Сулпан Асҡарова менән уйлап ултыра торғас, унан: "Башҡорт халҡында өлөштәрҙән йыйып тегелгән күлдәктәр булмағанмы?" — тип һорай ҡуйҙым. Сулпан: "Ҡырҡ ҡорама" тигәнерәк бейеү бар", — тип фекеремде эләктереп алды. Шунда уҡ Сибай ҡалаһындағы билдәле сәсәниә, "Ағинәйҙәр" клубы етәксеһе Асия Ғәйнуллинаға шылтыраттыҡ, һораутеләктәребеҙҙе еткерҙек. Асыҡланыуынса, борон ауырыу кешене һауыҡтырыу өсөн уға төрлө төҫтәге ҡораманан күлдәк тегер булғандар. Уйыбыҙ ошо өлкә белгесе тарафынан нығытылғас, эште дәррәү дауам иттек. Спектаклгә нимәлер әҙерләү ул тикшереү үткәреү, факттар, дәлилдәр йыйыу, аҙаҡ уларҙы бер картинаға туплау менән бер. Шулай итеп, беҙҙең уйыбыҙ ҙур бер тарих сүрәтенә инеп нығынды.

**— Спектаклде сығарыуҙа Асия Ғәйнуллина ла ҡатнашҡан, тимәк?**

— Уны беҙ консультант итеп саҡырҙыҡ, байтаҡ һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек. Һуңғараҡ тағы бер идея тыуҙы. Белмәйем, барлыҡ тамашасылар ҙа быны һиҙеп бармайҙыр, әммә спектаклдәге ҡара мөхит — ул тотошлай ҡара мунса итеп эшләнгән. Ғәлимәнең битенә ҡара һөрткәндән һуң уны ошо мунсаға ябалар. Аҡылы ла бер төрлөрәк булып китә. Уны өйөнә алып ҡайтһалар ҙа, ҡыҙҙың зиһене мунса кимәлендә, шундай моңһоу мөхиттә ҡала бирә. Ғәлимәне дауалау сәхнәһе лә Асия Ғәйнуллинаның төплө фекерҙәренән сығып ҡуйылды. "Борон нисек дауалағандар?" — тип һорайбыҙ. "Кәритәлә, уләндәр төнәтмәһе менән", — ти апай. Ысынбарлыҡта бындай һауыт бүрәнәнән өңөп яһалыр булған. "Ҡара йөҙҙәр"ҙә шулай итеп ағас кәритә лә килеп сыҡты, Ғәлимәне мунсала шунда дауаларға тырышалар.

**— Спектаклдең барлыҡ күренештәре лә мунсала бара, тип әйтмәксеһегеҙ?**

— Башлыса шулай. Ваҡыты-ваҡыты менән ағас "ҡалҡан"дар өҫкә күтәрелә лә, улар артында яҡты төштәр, хыялдар урын ала. Унда насарлыҡ бөтөнләй юҡ, сафлыҡ, нур ғына. Ғәлимә менән Закирҙың кейемдәрендә лә билдәле бер мәлдә ҡара ҡорамалар пәйҙә була. Бер иш итеп тегелгән күлдәктәр, әммә уларҙы шул ҡан, ҡайғы таптары ғына айыра. Спектакль башланғанда ла ҙур тауарҙы ҡыҙҙар төрлө сағыу төҫтәге ҡорама менән биҙәй, матур теләктәр әйтә.

**— Театрҙан башҡа ҡыҙыҡһыныу, шөғөлдәрегеҙ бармы?**

— Балыҡҡа йөрөү генә. Ә былай, театр — ул минен булмышым да, шөғөлөм дә, эшем дә.

*Гөлсәсәк МОСТАЕВА әңгәмәләште.*

Июньский номер журнала открывается рубрикой «Образование», статьей Рустема Вахитова, в которой выражается обеспокоенность в связи с затянувшимся процессом реформирования высшей школы.

Ф.Вахитов в рубрике «История» рассказывает о поисках места захоронения уроженца Чишминского района, замполита стрелкового батальона Гаймая Кальметова. Автор из г.Ростов-на-Дону М.Салимов пишет о боевом пути своего отца Бакира Салимова. Кандидат филологических наук Ф.Сулейманов знакомит с богатой историей старинного села Мерясово Баймакского района.

Рубрика «Литература» представлена рассказом Халиды Чембарисовой, подборкой стихотворений Ларисы Абдуллиной и рубаи Кадима Аралбаева.

М.Кутлугаллямов в рубрике «Публицистика» размышляет о некоторых явлениях в жизни нашего общества, ведущих к глубоким изменениям далеко не в лучшую сторону. Кандидат филологических наук Р.Шагиев рассказывает о плодотворной научной деятельности известного литературоведа, профессора БГУ Гульфиры Гареевой. М.Якупова вспоминает о миссии мира — «Поезде Дружбы» из Чечни, побывавшем в Уфе в 2005 году, и предлагает развивать многосторонние связи с этим регионом, где люди с уважением относятся к Республике Башкортостан.

В рубрике «Литературное наследие» С.Алиева, Р.Габбасов и А.Сулейманов предлагают подборку материалов, посвященных великому киргизскому эпосу «Манас».

Народный писатель Башкортостана С.Поварисов в рубрике «Литературная критика» анализирует преемственность творческих традиций современных башкирских поэтов и мастеров пера тюркского мира средних веков.

Радик Вахитов в рубрике «Фольклор» предлагает интересные архивные материалы, раскрывающие некоторые подробности подготовки к печати Народным сэсэном Башкортостана Мухаметшой Бурангуловым эпоса «Урал-батыр».

В рубрике «Культура и искусство» Л.Тагирова знакомит с молодой оперной певицей, участницей многих престижных международных музыкальных конкурсов Дилярой Идрисовой; Г.Мустаева предлагает интервью с обладателем театральной премии «Золотая маска», художником Альбертом Нестеровым.

The June issue of the journal begins with Education section containing an article by Rustem Vakhitov expressing concern about the protracted reforming process of higher schools.

F.Vakhitov in History section tells about searching for a burial place of Gaimai Kalmetov, a native of Chishminskiy district, zampolit — deputy of the commander for political work — of the rifle battalion. M.Salimov, an author from Rostov-on-Don town shares his memoirs on the battle way of his father Bakir Salimov. Candidate of philology F.Suleymanov introduces to Meryasovo village, Baimakskiy district, which has a long rich history.

Literature rubric features a story by Khalida Chembarisova, Larisa Abdullina's verses, and rubais of Kadim Aralbai.

M.Kutlugallyamov in Publicism ponders over some phenomena of our society, leading to profound alterations far from being good. Candidate of philology R.Shagiev acquaints to the scientific activity of well-known literary critic, professor of BSU Gulfira Gareeva. M.Yakupova recalls the peacekeeping mission — "The Train of Friendship" from Chechnya, visited Ufa in 2005, and offers to develop multilateral connections with the region where people treat the republic of Bashkortostan with respect.

Literary Heritage section contains materials concerning Manas, the great epic of the Kyrgyz people, presented by S.Alieva, R.Gabbasov, and A.Suleymanov.

The Peoples' writer of Bashkortostan S.Povarisov in Literary Criticism analyses the continuity of creative traditions of present Bashkir poets and the medieval authors of Turkic world.

Radik Vakhitov in Folklore renders interesting archival data revealing some details concerning the Peoples' sasan of Bashkortostan M.Burangulov's work on the epic Ural-batyr.

Culture and Art section concludes L.Tagirova's article on the young opera singer, participant of many international song contests Dilyara Idrisova, G.Mustaeva renders an interview with the winner of the Golden Mask theatrical award, artist Albert Nesterov.